# УЧАЛЫЛАР ИЖАДЫ

## БАЛАЛЫҠ ДУҪТАРЫМА

*Мәүлит ЯМАЛЕТДИН*

*Ай ниндәйҙер йыһан һәләкәте ваҡытында ерҙән айырылып сыҡҡан киҫәксәләрҙең уҡмашыуынан барлыҡҡа килгән, тигән фараз бар.*

Хәтеремдә: ауыл.
　　　　Ҡышҡы эңер.
Ай нурына төрөнгәндәр көрттәр.
Үрә ҡатып, йыһан яңғыратып,
Тулған айға ҡарап олой эттәр.

Эттәр олой.
　　　　Улар тауышында
Иҫ китмәле хәсрәт, шом һәм хафа,
Хатта беҙҙең аҡ ҡар төҫлө таҙа
Сабый күңелдәрҙе һағыш баҫа.

Ҡайһыһылыр бик йәл: моңһоу аймы,
Әллә этме? — аңлатыуы ауыр...
Бик алыҫта ҡалды ул ҡышҡы кис,
Бик алыҫта ул саҡтағы ауыл.

Ерҙән уйылып осҡан ай шикелле
Тыуған төйәктәрҙән айырылдыҡ;
Тормош бөгөлөндә беребеҙ уңға,
Икенсебеҙ һулға ҡайырылдыҡ.

Ғүмер орбитаһын урай-урай
Бала саҡтан киткән һайын йыраҡ,
Эттәр олоуында шом көсәйә,
Ай нурҙары төшә моңһоуыраҡ.

* * *

Мин ҡышҡыһын яуған ҡар кеүекмен,
Ә һин, иркәм, гүйә, яҙғы ҡар.
Шуға күрә бөтөн булмышыңда
Яҙын яуған ҡарҙар наҙы бар.

Мин ҡышҡы ҡар.
　　　　Бергә уҡмашҡан да,
Бөртөктәрем ҡатҡан көрт булып.
Мин дә бер саҡ ергә һинең һымаҡ
Аҡ нур булып аҡтым эркелеп.

Булмышым да һинекеләй дәртле,
Һинекеләй көләс, шат ине.
Йәнде иҙә торған уй-һағыштар,
Һыҙланыуҙар миңә ят ине.

Кисерә күр, иркәм — һине күргәс
Ваҡыт айырмаһын оноттом;
Мин дә яҙғы ҡар, тип хис иттем дә,
Сама тойғоларын юғалттым.

Урамда ҡыш.
　　　　Бурап ҡарҙар яуа.
Көндән-көнгә һалҡын ҡатыраҡ.
Ҡышҡы ҡарҙар нисек түҙер икән —
Яҙға тиклем йыраҡ, бик йыраҡ.



* * *

Мөриттәре инанғандай
Бәйғәмбәр Мөхәммәткә,
Иҫ-аҡылдарымды юйып
Табындым мөхәббәткә.
Әйттеләр: «Гонаһың бик ҙур,
Йәһәннәм көтә һине,
Лайыҡлы яуаптарыңды
Әҙерлә ҡиәмәткә!»

Ә минең яуабым әҙер —
Тирбәлә алҡымымда:
«Йәшәүем хаҡ, ғүмер буйы
Мөхәббәт шауҡымында.
Тик ут менән ҡурҡытмағыҙ,
Табығыҙ бүтән яза —
Ерҙә саҡта ғазапландым
Мөхәббәт ялҡынында!»

* * *

Күңел төбөндәге серем дә һин,
Йоҡо ҡасыр айһыҙ төнөм һин.
Дауылдарҙан йолоп алып сыҡҡан,
Юл күрһәткән яҡты көнөм һин.
Һүнмәҫ ышанысым, яҙмышым һин,
Ҡайнау дәрте һөйгән эшемдә.
Йыуанысым ауыр сәғәттәрҙә,
Батырым һин таңғы төшөмдә.
Бар дәүләтем, бөтмәҫ ғазабым һин,
Ҡәс биреүсе ҡалған ғүмергә.
Йондоҙ кеүек дөрлә, яҡтырып тор,
Тик ашыҡма алдан һүнергә.

## ТЕЛЕПАТИЯ

Ҡапыл ғына әллә нимә булды:
Тотҡан әйбер төшә ҡулымдан.
Ошо минуттарҙа ой тарайҙы —
Тышау ята кеүек юлымда.
Урын таба алмай, йөрәкһенәм,
Әллә нимә етмәй, йонсота.
Урамда ла бола: буран йөрөй,
Әлгән керҙе килеп ел йолҡа.
Сәғәт телгә килде. Һәм, ниһайәт,
Айышына хәлдең төшөндөм...
Тап шул ваҡыт... Кисә бергә инек...
Һин, моғайын, иҫкә төшөрҙөң.

## ҮҘЫШ

Иң ғәжәйеп ваҡыт килеп етте —
Көн менән төн тигеҙләнде бөгөн.
Икеһе лә улар бер хоҡуҡта,
Береһе оҙон, береһе ҡыҫҡа түгел.

Ике үлсәм тигеҙләнде.
Улар
Айырыла бары төҫө менән.
Береһе тыуһа ҡояш көҙрәтенән,
Икенсеһе — айҙың тылсымынан.

Ай һәм ҡояш йыһан киңлегендә
Бер-береһе менән ҡауышмаҡта;
Яҡтылыҡ һәм ҡараңғылыҡ булып
Шәүләләре ерҙә үҙышмаҡта.

Бына, бөгөн улар тигеҙләнде —
Ай шәүләһе көндө ҡыуып етте.
Бер минут тын ҡалып, сәмен туплап,
Көн яҡтыһы төндө ҡыуа китте.

*Шәүлиә ЗӨЛКӘРНӘЕВА*

## ҮҘ ИЛЕҢДӘ ОЛТАН БУЛ

Күк болоттар аша шаңдау булып,
Зәңгәр таулы урман яғына
Күкрәгәндә тәүге яҙғы күкрәү
Йөрәгемдән моңдар ағыла.

Әй, Учалым, күл-урманлы илем,
Күп йөрөнөм ситтә аҙашып,
Ғәзиз ерем, һиндә тамырҙарым,
Юлдарымдың башы. Аҙағы...

Башҡа яҡта хеҙмәт күрһәтеп тә,
Булып йөрөһәң дә ҡәҙерле,
Ҡара икмәк ашап үҫкән яҡта
Олтан булыуҙары хәйерле.

Күк болоттар аша шаңдау булып,
Зәңгәр таулы урман яғына,
Күкрәгәндә тәүге яҙғы күкрәү
Йөрәгемдән моңдар ағыла.

*Фәрит ХӘСӘНОВ*

## УЧАЛЫМ — ИЗГЕ ЕР

(Йыр)

Учалым — изге ер,
Гөл-сәскә ҡосағың.
Мөғжизә иле һин,
Йыр һәм моң усағы.
Батырҙар, матурҙар,
Маһирҙар төйәге.
Халҡыма бирелгән
Хоҙайҙың бүләге.
Йөрәккә йондоҙҙар
Балҡышы күскән ер.
Күңелдәр ҡурайға
Үрелеп үҫкән ер.
Хаж ҡылыр тауым бар.
Болоттан таж кейгән
Мәңгелек хозурлыҡ
Алдында баш эйәм.
Халҡым бар ялҡындай —
Егеттәр, ҡыҙҙары
Йөрөтә һүндермәй
Илһам, дәрт ҡуҙҙарын.
Учалым — изге ер,
Гөл-сәскә ҡосағың.
Мөғжизә иле һин,
Йыр һәм моң усағы.

*Гөлсирә МОСТАФИНА*

Уйылырҙай булып уйланамын,
Яҙыр сиккә етеп аңымдан.
Ышанмайым һаман, мәңгелеккә
Китеүеңә минең янымдан.
Бик бәхетле булған икән, тием,
Һинең менән үткән юлдарым.
Ун туғыҙ ҙа ғына яҡты көндәй
Һинең менән үткән йылдарым.
Бер күреүҙән һиңә ғашиҡ булып,
Һөйөүҙәрҙән шашып аҙаштым.
«Үлеп яратам», — тип әйткәйнең һин,
«Үлеп ҡуйма», — тиеп шаярттым.
...Ишетелмәй хәҙер тауышың да,
«Яратам», — тип әйткән һүҙҙәре.
Мөлдөрәп тә ҡарамайҙар миңә
Һөйөү тулы ҡара күҙҙәрең.
Бар мәшәҡәт ҡалды бер үҙемә.
(Унығына күнәм, мин түҙем).
Донъя йөгөн һалып иңдәремә,
Йөк атылай тартам бер үҙем.
Ауырлыҡтан ҡурҡмайым да ул мин, —
Осрап тора улар көн һайын.
Сабырлыҡты юя юғалтыуҙар,
Уға түҙеүҙәре, ай, ҡыйын.

*Байгилде ЯНБУЛАТОВ*

## УЧАЛЫҒА

Тәбиғәтең ҡырыҫ, тиһәләр ҙә —
Аҡ ҡайындарыңа ғашиҡмын.
Эс серҙәрем таша башлаһалар,
Зәңгәр күлдәреңә ашыҡтым.

Урал артында ла тормош ҡайнай,
Үгәйһетмәй бәхет ҡояшы.
Һиндә таптым ғүмер юлдашымды,
Балаларым башлай юл башын.

Кейәү булып ҡына туйлап ятмам,
Иңемә һал биштәр ебеңде.
Туған улың булып тартайым мин
Оло юлда оло йөгөңдө.

## ТАУСЫҒА

Бөйөклөгөн беләм уйҙарыңдың
Күкһел Ирәмәлгә тиңлеген.
Йәйрәп ятҡан дала юҡ та кеүек,
Ҡайҙан алдың күңел киңлеген?

Хазина эҙләп ер аҫтына төшкәс,
Ныҡ тояһың йәшәү ҡәҙерен.
Бәхеттәрҙе үҙең ҡояһың һин,
Эҙләмәйһең уның әҙерен.

Аҡ ҡайындар һиңә сафлыҡ биргән,
Зәңгәр күлдәр биргән сабырлыҡ,
Эшең менән даның һоҡланырлыҡ,
Илһам бир гел миңә яҙырлыҡ.

## ҺӘЙКӘЛ ЯНЫНДА

Моңһоу уйға батып әсә тора
Текәлгән дә һәйкәл ташына,
Яуҙа ятып ҡалған улын күреп
Һыйпағандай уның башынан.

— Буйың-һының һаман күҙ алдымда,
«Мин ҡайтырмын әсәй!» тиеүең,
Һине көтөп ҡартайып та киттем,
Ә һин шулай йәп-йәш көйөмө?

— Әйе, әсәй, беҙгә тура килде
Ҡыҫҡа йәшен булып йәшнәргә,
Тыуасаҡ көн, килер бәхет өсөн
Мәңге шулай ҡалып йәшәргә.

Һәйкәл эргәһендә әсә тора,
Һөйләшәләр улар икәүҙән:
— Даның ҡайтты, улым, йыраҡтарҙан,
Ҡайҙа ятып ҡалды һуң кәүҙәң?